*Зөһрә КАМАЛОВА*

# Зауыҡлы ижад


*Рәшит Хәбиров*

Мәскәүҙә, сит илдәрҙә йыл һайын абруйлы күргәҙмәләрҙә картиналарын күрһәтеп, юғары баһа алған башҡорт рәссамы. Башҡортостанда, баш ҡалабыҙ Өфөлә һирәк күренә кеүек. Кем һуң ул?

Бәхеткә күрә, уҙған йылдың көҙ айҙарында М.В.Нестеров исемендәге художество музейында рәссам Рәшит Хәбировтың шәхси күргәҙмәһе булып уҙҙы.

Күргәҙмәгә килеүселәр ҡыуанып һәм йыуанып ҡараны унын ижад емештәрен. Картиналарының һәр береһе айырым донъя, үҙенсәлекле мөхит, яҙмыш. Уларҙа башҡорт яҙмышы һынлана. Рәссамдың геройҙары араһында күренекле шәхестәр ҙә байтаҡ. Нигеҙҙә сәнғәтебеҙҙең төрлө тармаҡтарында дан һәм шөһрәт ҡаҙанған кешеләр: мәшһүр композиторыбыҙ Заһир Исмәғилев, балет йондоҙо Зәйтүнә Насретдинова, танылған драма актрисаһы Зәйтүнә Бикбулатова һәм башҡалар.

Күренекле балериналарға арналған картиналары ҡуйылған бүлеккә килеп инеү менән ошо илаһи сәнғәт әһелдәре ижад иткән һоҡланғыс бейеүҙәр донъяһына сумаһың. Уларҙы тамашасыға еткергәнсе күпме көсөргәнешлек, сикһеҙ түҙемлек талап ителеүен асыҡ тояһың. Ә башҡорт халҡының милли кейемдәре үҙҙәренең тәбиғи ысынбарлығы, сағыу төҫтәре менән иғтибарҙы йәлеп итә, халҡыбыҙҙың бай мәғәнәле матди мәҙәниәте өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уята.

Рәшит Хәбиров ишле ғаиләлә тыуып үҫә. Бәләкәйҙән әсәһе Шәфиға апайҙың нағышлап сиккән эштәрен, төҫлө ептәрҙән матур селтәр үрнәктәре бәйләүен күреп һоҡлана. Үҙе лә һүрәт төшөрә башлай. Ошо шөғөлө уны артабан Ҡ.Дәүләткилдеев исемендәге һынлы сәнғәт мәктәбенә алып килә, унан Мәскәүҙәге Суриков исемендәге институт эргәһендәге мәктәпкә илтә. Артабан буласаҡ рәссам ошо уҡ институтты тамамлай.

Рәшит Хәбиров ижад юлының башында һайлаған классик реализм алымынан тайпылмай ижад итә. Шуға күрә уның картиналары һәр кемгә аңлайышлы, һәр кем өсөн ҡәҙерле, бәҫле. Рәссамдың ихлас ижады милли мәҙәниәтебеҙҙең ғорурлығы, тип әйтергә мөмкин. Ул башҡорт сәнғәтен, башҡорт илен, халҡын алыҫ ҡитғалар аша донъя кимәленә алып сыҡты, сит ил тамашасыһын да һоҡланырға, уйланырға мәжбүр итте. Һуңғы йылдарҙа уның картиналары Франция, Германия, Бөйөк Британия һәм башҡа илдәрҙәге абруйлы күргәҙмәләрҙә юғары баһа алды.

Эйе, әсәһе Шәфиға Миңнислам ҡыҙы улының уңыштары, табыштары менән хаҡлы ғорурлана. Элекке уҡытыусы булараҡ, балаһының уңыштарында уның да өлөшө бар бит. Атаһы Солтан ағай ҙа улының матур ижад емештәрен күреп ҡыуанып бөтә алмай.

Яҙ көнө Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Рудольф Нуриев исемендәге X Халыҡ-ара балет сәнғәте фестивале булып уҙҙы. Фестиваль башланыу менән бер үк ваҡытта театр эрмитажында башҡорт рәссамы Рәшит Хәбировтың ”Балет, балет, балет...” тигән күркәм күргәҙмәһе асылды. Р.Хәбиров, ошо темаға арнап, үҙенең икенсе персональ күргәҙмәһен ойошторғайны. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, әлеге ваҡытта ул балет мөхитен, балет йондоҙҙарын яҡтыртыусы берҙән-бер рәссам. Башҡорт балетының легендаһына әүерелгән балериналар Зәйтүнә Насретдинова һәм Леонора Ҡыуатоваларҙың образдарын рәссам үтә нескәлек һәм ихлас күңел йылыһы аша һынландырыуға өлгәшкән.

Р.Хәбировтың ижадында яратҡан артистарыбыҙҙың быуындар бәйләнеше айырыуса асыҡ билдәләнә. Күргәҙмәлә урын алған өс тиҫтәнән ашыу картинаның күбеһе бейеүселәрҙең ҡәҙимге тормошон, күнекмә мәлдәрен сағылдыра. Әлеге ваҡытта балет труппаһының әйҙәүсе бейеүселәре Г.Мәүлекәсова, Е.Фомина, Р.Мөхәмәтов, Д.Зәйнитдиновтарҙың портреттары тап тормоштағыса булыуы менән һоҡландыра. Ә рәссамдың ”Тарих йондоҙо” тип аталған картинаһы улар араһында үҙенең мөһабәтлеге, ихласлығы менән арбай. Ул атаҡлы балет бейеүсеһе Рудольф Нуриевҡа арналған. Ғөмүмән, рәссам үҙе билдәләүенсә, балет донъяһы, уның ғәжәйеп таланттары күңеленә яҡын һәм ҡәҙерле. Шуға ла ижадының байтаҡ өлөшө ошо хаҡта һөйләй.

